Әхәт СӘЛИХОВ

# Әхмәтзәки Вәлиди менән Әбүбәкер Диваевтың мөнәсәбәте хаҡында

Рәсәйҙең бик күп билдәле ғалимдары Әхмәтзәки Вәлидиҙең тормошонда баһалап бөткөһөҙ роль уйнай. Шуларҙың береһе — сығышы менән башҡорт Әбүбәкер Әхмәтйән улы Диваев (1855—1933). Уның олатаһы Шаһиморат старшина булған. Атаһы хәрби хеҙмәт өсөн дворян титулы ала һәм Ырымбурҙа төпләнә. Ә.Диваев Неплюев исемендәге кадет корпусын тамамлағас, Урта Азияла хеҙмәт итә башлай. Бында ул үзбәк, ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙ халыҡтарының тормошо, йәшәйеше, фольклоры менән яҡындан танышҡан, этнографик материалдар йыйған, Урта Азия төрки халыҡтарының ауыҙ-тел ижады өлгөләрен яҙып алған һәм уларҙы Рәсәйҙә сыҡҡан баҫмаларҙа нәшер иткән. 1896 йылда Ә.Диваев Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәгенең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайлана. 1917 йылғы революция ваҡиғаларынан һуң ул Төркөстан халыҡ университеты һәм Төркөстан көнсығыш университетында мөғәллимлек итә. Ә.Диваевтың этнография менән шөғөлләнә башлауына Һырдаръя губернаһының генерал-губернаторы Н.И.Гродековтың 1884 йылда урындағы халыҡтың фольклорын һәм этнографияһын өйрәнергә теләүе сәбәп була. Н.И.Гродеков фән өсөн түгел, ә шул рәүешле Урта Азия халыҡтарын Рәсәйгә тағы ла нығыраҡ буйһондороу өсөн тырыша. Маҡсатына ирешеү йәһәтенән ул эшкә аҫаба халыҡтың теле, ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса белгес Ә.Диваевты йәлеп итә.


*Әбүбәкер Диваев*

Ә.Вәлиди уның менән Урта Азияға тәүге тапҡыр командировкаға барған сағында таныша. Был танышыу бик файҙалы була, сөнки Ә.Диваев аша ул бик күп билдәле кешеләр менән аралаша башлай. Ошо хаҡта ”Хәтирәләр”ендә ентекле итеп яҙа: ”Ул мине Ташкентта батша ғәскәрендәге башҡорт офицерҙарынан Көсөков һәм татарҙарҙан генерал Еникеев, Сәмәрҡәндтә ҡырғыҙҙар генерал Колчанов һәм Мирбәдәлиев, башҡорт Әкимбәтов менән таныштырҙы. Ҡайҙа ғына барһам да, унда Әбүбәкер ағайҙың мине таныҡкан һәм тәкдим иткән хаттары килеүен күрҙем. Ҡаҙаҡтарҙан ул саҡ гимназия уҡыусыһы, һуңынан коммунист Нәзир Түрәҡол (Түрәҡолов), Ташкенттан Петербург университеты хоҡуҡ бүлеге студенты Мостафа Чокаев, үзбәктәрҙән һуңынан шағир булған Ғәбделхәмит Сөләймән (Андижандан), йәнә Ташкенттан сығышы нуғайҙарҙан булған тарихсы Полат Сәли, үзбәктәрҙән Мәнәүер Ҡары һәм Убайдулла Хужа, Сәмәрҡәндтән Мәхмүт Хужа Беһбуди, Бохаранан Әхмәтйән Мәхдүм, йәнә ҡырғыҙҙарҙан башланғыс мәктәп уҡытыусыһы Йәноҙаҡ улы Ибраһим — шулар иҫәбенән”. Улар араһынан Ә.Вәлиди өсөн Нәзир Түрәҡол һәм Ғәбделхәмит Сөләймән (Сулпан) рухи яҡтан яҡын була.

1915 йылда Ә.Вәлиди Ә.Диваев тураһында ”Тормош” гәзитендә ике мәҡәлә баҫтырып сығара. Беренсеһе ”Өфөбөҙҙән сыҡҡан бер ғалимдың хеҙмәтенә 25 йыл тулыу мөнәсәбәте менән” тип атала һәм унда билдәле этнографтың хеҙмәттәре бик ентекле һәм төплө итеп тикшерелә. Ә.Вәлиди уның фольклор әҫәрҙәрен төрки теленән урыҫсаға тәржемә итеүен баһалап, былай тип яҙа: ”Әҫәрҙәрҙең русса тәржемәләре бик һәйбәт эшләнгән, Әбүбәкер әфәнде уларҙың рухын тулыһынса белеп тәржемә итә, үҙенсәлектәрен һаҡлай, күп мәртәбә ҡаҙаҡ йырҙарын руссаға рифмалап ауҙарҙы”.

Ә.Вәлиди фекеренсә, Ә.Диваевтың баҫылған әйберҙәренең бер генә етешһеҙлеге бар, ул да булһа — төрки телендә оригиналдың бирелмәүе. Әммә ғәйеп ғалимда түгел, ә йыйынтыҡты нәшер итеүселәрҙә, тип билдәләй автор.

Ә.Диваевтың фәнни-тикшеренеү эшмәкәрлеген ошолай һүрәтләй: ”Белеүебеҙсә, Әбүбәкер әфәнденең йыйған материалдары бик күп. Әгәр был хөрмәтле кеше бөтә баҫылған һәм баҫылмаған тәржемәләрен йыя алһа, бәлки, иншалла, уларҙы баҫтырырлыҡ бер һиммәт әһеле табылыр ине. Әбүбәкер әфәнде йыйған әйберҙәр беҙҙең телебеҙ һәм халҡыбыҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ хазиналыр. Әгәр улар төрки телендә нәшер ителһә, уларҙың ҡиммәте беҙҙең милли тормошобоҙ өсөн тағы ла артығыраҡ булыр ине. Милли тормошобоҙҙоң тәрәнлектәрен белергә теләһә, уға Радлов, Диваев, Катанов, Потанин тарафынан йыйылған милли үҙенсәлектәребеҙҙе үҙгәрешһеҙ һаҡлаған төрки этнографияһы буйынса материалдарҙы өйрәнергә кәрәк”.

Ә.Вәлиди Ә.Диваевтың ғилми эшмәкәрлегенә тик яҡшы яҡтан ғына баһа бирә, төрки халҡының тормошон һәм йәшәйешен һәйбәт белеүсе этнограф булараҡ уны хөрмәт итә. Уға фән өлкәһендә ҙур уңыштар юрап, былай ти: ”Беҙҙең Өфөбөҙҙән сыҡҡан башҡорт мырҙаһы Әбүбәкер әфәнде халҡыбыҙҙың рухын һәм йәнен яҡшы белә. Ул үҙ халҡын, уның яҡшы тарафтарын ярата. Беҙҙең ҡарт этнографыбыҙ әле бынан һуң да оҙон ғүмер йәшәйәсәк һәм уны халҡы ла таныясаҡ, ул үҙе лә үҙенең милли ҡәләменең эҙен һөйөклө халҡының яңы майҙанға сығып килгән һәм был хөрмәтле ҡартты ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтендә ҡалдырасаҡ тип өмөт итәбеҙ”.

Ә.Вәлидиҙең икенсе мәҡәләһе ”Диваевтың юбилейы рус йәмғиәтендә” тип атала. Мәҡәләлә Ә.Диваевтың юбилейы айҡанлы рус ғилми түңәрәктәрендә үткәрелгән тантаналар һүрәтләнгән, ғалимдың этнография өлкәһендәге эшмәкәрлеге ыңғай баһаланған. Аҙағында Ә.Вәлиди 1915 йылдың 21 ноябрендә Ә.Диваевтан алған хатына һылтанма яһай. Хаттың авторы Төркөстан археология һөйөүселәр түңәрәгендә үҙенә арнап үткәрелгән тантаналы йыйылыш хаҡында яҙған.

Эмиграцияға киткәс, 1924 йылдың 12 апрелендә Ә.Вәлиди Берлиндағы СССР-ҙың тулы хоҡуҡлы вәкиле Н.Н.Крестинскийға хат яҙған. Унда, беренсенән, ҡатыны Нәфисәгә бала менән Советтар Союзынан сығырға, икенсенән, ҡатынына уның шәхси ғилми китапханаһын үҙе менән бергә алырға, шулай уҡ Башҡортостанда ҡалған туғандары, Рәсәйҙең ҡайһы бер атаҡлы ғалимдары һәм ғилми ойошмалар менән хат алышырға рөхсәт һорай. Ул былай тип яҙа: ”Инҡилаптан алдағы бөтә ғилми эшмәкәрлегем рус ориенталистары даирәләре менән бик тығыҙ бәйле булғанлыҡтан, миңә хәҙер Рәсәй ғалимдары менән бәйләнешкә инергә кәрәк. Ленинградтан академик Бартольд, профессор Самойлович; Мәскәүҙән профессор Гордлевский; Ташкенттан профессор Шмидт, Әбүбәкер Диваев, Ҡазандағы, Ырымбурҙағы һәм Ташкенттағы халыҡ мәғарифы комиссариаты ғилми комиссиялары менән хат һәм китаптар алышырға теләр инем.

Гәзиттәрҙән минең менән хат алышҡан ҡайһы бер кешеләрҙең ҡулға алыныуы хаҡында белгәндән һуң, ошо үтенес менән мөрәжәғәт итергә бурыслымын. Рәсәй хөкүмәте миңә юғарыла иҫкә алынған кешеләр менән ғилми мөнәсәбәттә булырға рөхсәт итһә һәм уларҙы минең менән ниндәйҙер сәйәси бәйләнештә тороуҙа ғәйепләмәһә ине, сөнки Совет Рәсәй хөкүмәте әле булһа минең Рәсәй эсендәге теге йәки был сәйәси төркөмдәрҙең эшмәкәрлегенә бер ниндәй мөнәсәбәтем булмауы хаҡындағы белдереүемдең эскерһеҙ булыуына ышанмауын дауам итә”.

Шулай итеп, Урта Азия фольклоры һәм этнографияһы белгесе, сығышы буйынса башҡорт Әбүбәкер Диваев Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғалим булып формалашыуына ҙур йоғонто яһай.